
БАЙРАС
АБДУЛЛИН
Күнелкәйем
һине уйлайҙыр...
Күнелкәйем һине уйлайҙыр...
БАЙРАС АБДУЛЛИН



«Әлдә һин бар әле донъяла», «Әсәй ҡулдары», «Атай йорто», «Һаумы, тыуған яғым», «Ейәнсура» һәм башҡа йырҙары менән халыҡ араһында тиҙ танылыу алды композитор, дирижер, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Байрас Абдуллин.

1951 йылдың 1 мартында Ейәнсура районының Үрген ауылында Фуат һәм Баныу Абдуллиндар ғаиләһендәге ете баланың бишенсеһе булып донъяға килә. Уларҙың һәр береһе үҙенсәлекле һәм моңло тауышҡа эйә. Ғаиләлә һалынған йыр-моңға ынтылыш, тырышлыҡ Байрасты ғүмере буйы оҙатып йөрөй. Дүртенсе синыфты тамамлаған улын атаһы Өфөләге музыкаль тәрбиә биреү мәктәп-интернатына алып килә. Мәктәпте тромбон класы буйынса тамамлағас, һәләтле егет Ҡазан дәүләт консерваторияһында белем ала. Әрме хеҙмәтендә лә ул музыканан айырылмай: тәүҙә Волга буйы Хәрби округының йыр һәм бейеү оркестры, ә аҙаҡ Чехословакияла Совет ғәскәрҙәренең Үҙәк төркөмө ансамбле солисы була.







Мәктәпте тромбон класы буйынса тамамлағас, һәләтле егет Ҡазан дәүләт консерваторияһында белем ала. Әрме хеҙмәтендә лә ул музыканан айырылмай: тәүҙә Волга буйы Хәрби округының йыр һәм бейеү оркестры, ә аҙаҡ Чехословакияла Совет ғәскәрҙәренең Үҙәк төркөмө ансамбле солисы була.





Өфөгә ҡайтҡас, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының симфоник оркестрында эш башлай. Ә 1983 йылда ул РФ Эске эштәр министрлығы Юридик институтының тынлы оркестрын ойошторҙо һәм ун һигеҙ йыл унның менән етәкселек итте. 2001 йылда иһә подполковник Абдуллин Юстиция министрлығының тынлы оркестрын ойошторҙо. Был коллективтар республика, төбәк-ара конкурстарҙа еңеп, лауреат һәм дипломант исемдәрен ала, «Халыҡ оркестры» тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ була. 2004 йылда Байрас Абдуллин етәкләгән оркестр Түбәнге Новгород ҡалаһында үткән Бөтә Рәсәй конкурсында еңеү яулай.


одноклассники.ru

# Парк Якутова. 1997.





После семейного концерта в Доме Офицеров.



















по